# Башкирские подвижные игры



# «Бәшмәк йыйыу»

Балалар түңәрәккә баҫа. Уйынды ойоштороусы ике уйнаусыны түңәрәк эсенә саҡырып сығара һәм уларҙың күҙен бәйләй. Күҙе бәйләнгәндәрҙең аяҡ аҫтына «бәшмәк» рәүешендә бер нисә әйбер ҡуйыла.

Уйынды ойоштороусы, күҙе бәйләнгәндәргә, бер минут эсендә бәшмәктәрҙе йыйып бөтөргә бойороҡ бирә. Түңәрәк эсендәгеләр төртөшә – төртөшә «бәшмәк» йыя башлайҙар. Кем билдәләнгән ваҡытта күп «бәшмәк» йыйып өлгөрә, шул еңеүсе тип иғлан ителә. Түңәрәк эсенә башҡа уйнаусылар сыға.

Был уйынды ике тигеҙ төркөмгә бүленеп тә уйнарға була.



## «Исемен әйт»

Уйнаусылар араһынан берәүҙең күҙҙәрен яулыҡ менән бәйләйҙәр ҙә уны түңәрәк уртаһында ҡалдыралар. Ҡаршыһына бер бала сыға, ә түңәрәктәгеләр түбәндәге таҡмаҡты әйтә

Күңелең менән ныҡлап уйла
Алдыңда кем торғанын
Яңылышмайса әйтеп ҡара
Исеме кем булғанын.

Күҙҙәре бәйләнгән уйнаусы, алдында торған баланы ҡапшап уның исемен әйтергә тейеш. Әгәрҙә уның исемен дөрөҫ әйтһә, исеме әйтелгән баланың күҙен бәйләйҙәр. Дөрөҫ әйтмәһә, ул түңәрәк уртаһында күҙе бәйләнгән килеш ҡала, ҡаршыһында торған баланы алмаштыра баралар. Уйын шул тәртиптә дауам итә.



## «Йөҙөк кемдә»

Балалар эскәмйәгә теҙелешеп ултыра. Араларынан бер «үгеҙ» һайлана. Ул балаларға ҡаршы ултырғысҡа ултыра. Уйнаусылар менән «үгеҙ» араһы өс, дүрт метр. Балалар араһынан уйынды алып барыусы – көтөүсе һайлана. Уйынды алып барыусы ҡулына йөҙөк йәки берәй бәләкәй әйбер алып, уны эскәмйәлә ултырған бөтә балаларҙының да усына йомдорған кеүек итеп рәтләп йөрөп сыға. Йөҙөктө бер уйнаусыға ғына һалып ҡалдыра. Һуңынан ҡаршыла иғтибар менән күҙәтеп ултырған баланан

- «Үгеҙ», йөҙөк кемдә? – тип һорай.

Эскәмйәлә ултырған уйнаусылар барыһы ла йөҙөктө үҙ устарында йомған кеүек ултыралар. «Үгеҙ» береһенең исемен әйтә. Әгәр йөҙөк уның усында булһа, «үгеҙ» исеме әйтелгән баланың урынына ултыра. Хәҙер уйынды йөҙөк сыҡҡан уйнаусы алып бара, ә башта йөҙөк һалған көтөүсе «үгеҙ» урынында – ҡаршыға ултыра. Ә инде «үгеҙ» йөҙөкле баланы таба алмаһа, ул урынында бирә. Йөҙөк оҙак табылмай китһә, «үгеҙ» гә яза бирәләр: йыр йырлаталар йәки шиғыр һөйләтәләр. Һуңынан «үгеҙ» булған бала иптәштәре янына барып ултыра, сираттағы уйнаусы йөҙөк һалыусы була, ә тәүге көтөүсе «үгеҙ» урынын ала. Уйын яңынан башлана.

**Ҡағиҙәләр**. «Үгеҙ» йөҙөкте тапһын өсөн күп тигәндә дүрт тапҡыр йөҙөк һалына. Балалар барыһы ла « үгеҙ» алдында « йөҙөк миндә» тигән ҡиәфәттә ултыралар. Әгәр шул саҡта йөҙөклө уйнаусы « үгеҙ» гә йөҙөгөн күрһәтһә, көтөүсе тарафынан ул «язалана» – уйындан сығарыла.

**Уйындың әһимиәте.** Балаларҙа иптәшлек хисе, диҡҡәтлелек, күҙәтеүсәнлек, ойоштороусанлыҡ һәләттәре тәрбиәләнә.

## «Йәшерәм яулыҡ»

**Әҙерлек.** Был уйынды ҡыҙҙар бик яратып уйнай. Уйында ҡатнашырға теләгәндәр, һанашмаҡ әйтеп, көтөүсе һайлайҙар. Башҡалар, түңәрәк яһап, бер – береһенә һырыҡышып ултыралар. Көтөүсе ҡулына яулыҡ ала.

**Уйындың аңлатмаһы.** Көтөүсе булһан бала, әйтәйек, Зифа исемле ҡыҙ, яулыҡ тотоп түңәрәк ситенә сыға ла бөтә ҡыҙҙар менән бергә йырлай башлай:

Йәшерәм – йәшерәм яулығымды
Йәшел ҡайын аҫтына,
Һиҙҙермәйсә һалып китәм
Бер иптәшем артына.

Был ваҡытта Зифа түңәрәкте уратып йөрөргә тейеш һәм бер уңайлы ваҡытта һиҙҙермәйсә генә яулыҡты бер иптәшенең артына һалып китә. Ә үҙе һаман яулыҡты йәшереп тотҡан кеүек булып йөрөй. Артында яулыҡ ятҡан ҡыҙ, мәҫәлән, Зөһрә, Зифа түңәрәкте әйләнеп килгәнсе, үҙенең артында яулыҡ ятҡанын һиҙмәй ултырһа, Зифа яулыҡты тиҙ генә ала ла Зөһрәне яулыҡ менән һуҡҡылап түңәрәкте әйләнеп сыға.

Аҙаҡтан Зөһрә яулыҡ менән тороп ҡала, ә Зифа уның урынына барып ултыра. Әгәрҙә түңәрәктә ултырған бала артына яулыҡ һалынғанын һиҙеп ҡалһа, ул тиҙ генә тороп яулыҡты һалып киткән ҡыҙ артынан йүгерә. Ә яулыҡ һалып киткән ҡыҙ, яулыҡтан һуғылмаҫ өсөн, түңәрәк буйлап йүгереп иптәшенең урынына ултырырға ашыға. Әгәр ултырып өлгөрмәһә, тағы ла яулыҡ менән тороп ҡала. Йәнә йыр башлана. Уйын шул рәүешле бик ҡыҙыҡлы бара.

# «Баҫтырышмаҡ»

**Әҙерлек.** Ҡыҙҙар менән малайҙар ишләшеп түңәрәккә баҫа: ҡыҙ алда, малай уның артында тора. Уйынды ойоштороусы, түңәрәк уртаһына сығып, һәр бер һүҙҙе бер ишкә тура килтереп һанашмаҡ әйтә:

Йәй китте, көҙ килде, өйрәк китте, ҡаҙ китте,
Һандуғастар һайраны, балалар ҙа йыйылды,
Ҡарға, сыпсыҡ, һин тор, ул сыҡ!

«Сыҡ» һүҙе тура килгән иш уйынды башлап ебәрә.

**Уйындың аңлатмаһы.** Иштең береһе түңәрәк буйлап тышҡы яҡтан ҡаса, икенсеһе уның артынан ҡыуып китә. Баҫтырыусы, ҡасыусыны ҡыуып етеп, уға һуға ла үҙе кире яҡҡа ҡаса һәм баҫтырыусы инде ҡыуып еттем тигәндә, түңәрәктә торған иштәрҙең алдына барып баҫа. Артта торған бала, шунда уҡ баҫтырыусынан ҡасып, түңәрәк буйлап йүгереп китә һәм йылғыр, етеҙ булып тотолмаһа, икенсе иштәрҙең алдына барып баҫа. Тотолһа, тотҡан баланы баҫтырып китә. Уйын шул тәртиптә дауам итә.

**Уйындың әһәмиәте.** Балаларҙың хәрәкәт итеү мөмкинселектәрен физик яҡтан үҫтереүгә һәм камиллаштырыуға ыңғай тәьҫир яһай; иғтибарлылығын тәрбиәләй.



## «Бесәй менән сысҡан»

**Әҙерлек.** Балалар ҡулға – ҡул тотоношоп, ҙур түңәрәк яһайҙар. Араларынан бер уйнаусы «бесәй», икенсеһе «сысҡан» була.

**Уйындың аңлатмаһы.** Уйынды ойоштороусының сигналы менән «сысҡан» түңәрәк яһап торған балалар араһынан ҡаса, ә «бесәй» уның артынан төшә. «Бесәй» « сысҡан» йөрөгән юлдан ғына йөрөмәй, уға ҡаршы ла, юлына тура ла төшөп тота ала. «Бесәй» «сысҡанды» тотҡас, «сысҡан» булған бала түңәрәккә баҫа, ә «бесәй» «сысҡан»ға әүерелә. Түңәрәктән икенсе уйнаусы – «бесәй» - сыға һәм тағы ҡыуышыу башлана.



«Дауыл»

Балалар ҡапма – ҡаршы ике эскәмйәгә тигеҙ бүленеп ултыралар. Уйынды алып барыусы «йәшен» тиһә, балалар сәпәкәй саба, «ямғыр» тиһә, тубыҡҡа ҡул менән һуғалар, «күк күкрәй» тиһә, аяҡ дөбөрләтәләр, «дауыл» тиһә, һәр төркөм үҙ эскәмйәһен бер ҡат урап йүгерә. Үҙ урындарына алда килеп ултырған төркөм еңеүсе була.



## «Айыу – бүре юҡ икән»

**Әҙерлек.** Был уйын кесе йәштәге балалар араһында ныҡ таралған. Балалар үҙҙәренең араһынан берәүҙе «айыу» итеп һайлайҙар. Уға бәләкәй түңәрәк – «өң» һыҙыла. «Өң» дән 20 метр самаһы алыҫлыҡта ҙур түңәрәк булла. Уныһы балаларҙың «өй»ө тип иҫәпләнә.

**Уйындың аңлатмаһы.** Балалар «өй»ҙән сығып, бергәләшеп «айыу» торған яҡҡа еләк йыйырға киткән булулар. Был ваҡытта «айыу» боҫҡан булып ҡылана. Балалар еләк йыйғанда күмәкләп йырлайҙар:

Еләк йыям, ҡаҡ ҡоям әсәемә бүләккә.
Бында еләк күп икән, айыу – бүре юҡ икән.

Шул ваҡытта «айыу» йүгереп сығып, балаларҙы баҫтыра, ҡыуа башлай. Балалар, унан ҡасып, үҙ «өйҙәр»е яғына йүгерә. Тотолған бала «айыу» була. Уйын яңынан башлана.



## «Еҙ бүкән»

**Уйын урыны.** Ауыл осондағы сирәм ер, туғай йәки болон, майҙансыҡ.

**Әҙерлек.** Уйнарға теләгән балалар ишләшәләр, араларында берәү ишһеҙ ҡала. Ишлеләрҙең кесерәктәре түңәрәк яһап, «еҙ бүкән» булып, сүгеп ултыра. Өлкәнерәктәр «еҙ бүкән» булып ултырған балаларҙың артына барып баҫа.

**Уйындың аңлатмаһы.** Ишһеҙ бала берәй «еҙ бүкән» янына килә лә уның артында тороусы менән һүҙ әйтешә:

- Еҙ бүкәнде һатыуҙанмы?
- Еҙ бүкәнде һатыуҙан.
- Хаҡын күпме биреүҙән?
- Хаҡ ярым хаҡ, бот ярым бот.
- Әйҙә йүгерешәйек, кем килеп алыр икән? – тип әйтешәләр ҙә түңәрәк тышынан ҡара – ҡаршы йүгереп әйләнәләр. «еҙ бүкән» алдан өлгөргәнгә эләгә. Ишһеҙ ҡалған бала, икенсе бер иш янына барып, үрҙәгесә һүҙ башлай. Уйын шулай дауам итә.

**Ҡағиҙәләр.** Ҡара-ҡаршы йүгереүселәргә түңәрәк эсенән үтергә һәм түңәрәктән ситкә китергә ярамай. «Еҙ бүкән» булып сүгеп ултырған балалар, бер аҙ уйнап алғас, ише менән урынын алмаштыра.

**Уйындың әһәмиәте.** Етеҙлекте һәм йылдамлыҡты үҫтерә.



# «Туп бәреш»

**Әҙерлек.** Аралары 6 -7 метр самаһы ике һыҙыҡ һыҙыла. Ике уйнаусы һыҙыҡтар ситенә, ә ҡалған уйнаусылар – уртаға баҫа. Һыҙыҡ ситендәге бер уйнаусының ҡулында туп.

**Уйындың аңлатмаһы.** Уйынды ойоштороусының сигналы буйынса урталағы балаларға алмаш – тилмәш тупты бәреп тейҙерергә тырышалар. Урталағы балалар туптан ҡасырға тырышып бер яҡтан икенсе яҡҡа йүгереп йөрөйҙәр.

Аяғына тейҙергән балалар берәм – берәм уйындан сығалар. Кем аяғына тейҙермәйенсә бер үҙе уртала ҡала, шул еңеүсе булып таныла.

Яңы уйынды туп бәреүсе булып, беренсе һәм икенсе уйындан сыҡҡан балалар башлай.



**Йәбешкәк бүкәндәр.**

Өс-дүрт бала сүкәйеп бер – береһенән алыҫыраҡ ултыралар. Улар -йәбешкәк бүкән . Ҡалған уйынсылар майҙан буйлап йүгерәләр. Улар йәбешкәк бүкәндәргә яҡын килергә тейеш түгел. Йәбешкәк бүкән эргәһенән йүгереп үтеп барған баланы ҡулы менән тейеп ҡалырға тырыша. Кемгә тейгән, шул бала, бүкәнгә әйләнә.

**Ҡағиҙәләр.** Бүкәндәр урынан торорға тейеш түгел.



# Башкирские игры, пословицы, поговорки.



# Башкирские игры, пословицы, поговорки.

# Пословицы народов мира

# Диплом

Муниципальное казенное учреждение «Отдел Образования» администрации муниципального района Кармаскалинский район Республики Башкортостан

## Награждает

Ансамбль «Чебурашки»
МАДОУ детский сад № 1
с. Кармаскалы – участников
республиканского марафона
«Салям, Башкортостан»

воспитатель Хамидуллина И.Г.
музыкальный руководитель Муртазина Г.Р.

Начальник отдела образования Г.М.Исанбаева